***Рөстәм РӘЖӘПОВ,***
***БДУ-ның Совет дәүеренә тиклемге***
***башкорт әҙәбиәте кафедраһы өлкән уҡытыусыһы***

# Башҡорт ғишыҡ йырҙары

Башҡорт һүҙ сәнғәтен өйрәнер булһаң да, дөйөм тарихи-мәҙәни мираҫты тикшерергә теләһәң дә, был эштең төп өйрәнеү объекты — текстарҙың булыуы шарт. Текстарҙы өйрәнеп кенә һүҙ сәнғәтен бөтә тәрәнлегендә тикшереү, әҙәби-мәҙәни күренештәрҙең тарихи-теоретик нигеҙҙәрен, методологик принциптарын, ғилми концепцияларын аныҡ билдәләү мөмкин. Шуныһы ҡыҙғаныс, текстар, яҙма традицияныҡы булһынмы, фольклорға ҡарағанымы, быуаттар дауамында төрлө фажиғәләр, ҡыйралыштар, идеологик сәбәптәр арҡаһында даими тип әйтерлек юҡҡа сығарылып торған. Рәсәй империяһы алға һөргән ортодоксаль (православ) миссионерлыҡ сәйәсәте, үҙҙәрен артыҡ тәҡүәле иҫәпләгән мосолман руханиҙары, һуңынан һуғышсан дәһрилек тәғлимәте ҡалыптарынан ары күрмәгән большевик дәүләте тарафынан үткәрелгән сәйәсәт арҡаһында биниһая-бихисап рухи йәдкәрҙәребеҙ беҙҙең көнгә килеп етә алмаған.

Башҡорт текстологияһының, элекке СССР биләмәләренә ҡараған башҡа төрки халыҡтарыныҡы кеүек үк, бер ҙур ғәмәли ауырлығы булып XX быуат эсендә генә өс төрлө яҙмала текстар ижад ителеү мәсьәләһен телгә алмау мөмкин түгел. Мең йылдан ашыу ғәрәп яҙмаһын үҙ милли яҙмаһы сифатында ҡулланған халыҡ XX быуаттың 20-се йылдарының тәүге яртыһында шул яҙманы модернлаштырып, яңынан формалаша башлаған әҙәби телебеҙгә ҡулайлаштырыу маҡсатында үҙгәртеп, ғәрәп графикаһындағы ”яңы әлиф”, һуңынан латин һәм тиҫтә йылдан кириллица графикаларына күсергә мәжбүр ителә. Һөҙөмтәлә әҙәби-мәҙәни процестың өҙлөкһөҙлөгөнә балта сабыла.

Һәр халыҡтың һүҙ сәнғәтен, туҡтауһыҙ үҫеш һәм үҙгәрештәге даими процесс буларак, эҙмә-эҙлекле өйрәнеү, асылда, һәр заманға ҡараған текстарҙы йәмғиәттә әле хакимлыҡ иткән идеология-тәғлимәт йоғонтоһонан йәки ҡыҫаларынан мөмкин булғанса азат ҡараштан сығып, берҙәй ҡиммәтле һәм берҙәй әһәмиәтле итеп, ниндәйҙер осорҙарҙы, тематик йүнәлештәрҙе йәки жанрҙарҙы ”аҡ таптар” итеп ҡалдырмай, фәҙел өйрәнеүҙән ғибәрәт. Был бик етди һәм мөһим, ҡатмарлы мәсьәлә.

Тексты, яҙма әҙәбиәттеке булһынмы, фольклорҙыҡымы, ысын мәғәнәһендә йәмғиәттә йәшәй башлауы уның нәшер ителеүенән башлана тиһәк, хата булмаҫ. ”Үле” текст йәмғиәттең ижтимағи фекере күренешенә әүерелгәндән һуң ”терелә”. Ләкин һәр яҙма үҙ ваҡытында, күп осраҡта үҙ илендә нәшер ителеү мөмкинлегенә эйә була алмай. Бының үҙ сәбәптәре бар. Был яҙмышҡа айырыуса төрлө тематик йүнәлештәге жанр һәм тематик йыйынтыҡтар дусар булыусан. Улар араһында үҙ илендә төрлө сәбәпле тыйылған, ҡулдан-ҡулға күсерелеп йөрөтөлгән ирекле поэзия үрнәктәре айырым урын алып тора. Н.П.Огарев тарафынан 1861 йылда Лондонда нәшер ителгән ”Русская потаенная литература XIX столетия” тигән бил-

дәле йыйынтыҡ рус һүҙ сәнғәтендә был төр баҫмаларҙың иң тәүгеләренән һанала[1]. Сит илдә нәшер ителгән ундай йыйынтыҡтар байтаҡ ҡына: ”Солдатские песни” (Лондон, 1862), ”Свободные русские песни” (Берн, 1863), ”Вольный песенник” (Женева, 1870) һ.б. Улар замананың азат йыр-шиғриәт өлгөләре булып тороуҙары менән ҡиммәт, халыҡ араһында рәсми идеология, руханиҙар тарафынан тыйылған, юҡ ителергә дусар булған мираҫты һаҡлауҙары менән мөһим.

Әлбиттә, ирекле поэзия өлгөләрен эротик йөкмәткеле текстар ҡатламынан тыш күҙ алдына килтереп булмай. Һүҙ сәнғәтенең был өлкәһенең мөһимлегенә АҠШ һәм Европа илдәрендә эротик поэзия өлгөләренең һәм уларҙы өйрәнеүгә бағышланған ғилми тикшеренеүҙәрҙең күп һанда нәшер ителеүе дәлил булып тора[2].

Сит илдә нәшер ителгән башҡорт йыр поэзияһы өлгөләренән әлегә беҙгә мәғлүме Германияла беренсе донъя һуғышында хәрби әсирлектә булған башҡорт һалдаттарынан яҙып алынып, 1939 йылда нәшер ителгән йырҙарҙы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми сәркәтибе Әхәт Сәлихов ”Ватандаш” журналында баҫтырып сығарткайны.

Уҡыусыларға тәҡдим ителгән ”Башҡорт ғишыҡ йырҙары” шәлкеме иһә һүҙ сәнғәтебеҙҙең ошо төрөнә ҡараған өлгөләрҙән беҙгә мәғлүмдәренең тәүгеһе. Билдәле венгр ғалимы Армини Вамбери тарафынан Будапештта ”Nyevltud omanyi kuzlemenyek” (”Тел ғилеме тикшеренеүҙәре”) журналының 1883 йылғы ун етенсе томында нәшер ителгән был материалды 1998 йылда, ул ваҡытта БДУ аспиранты, әле Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре Буранбай Ильясов табып алып ҡайтҡайны. Был уникаль ҡомартҡылар, ниһайәт, йәмәғәтселек хөкөмөнә сығыуға ирешә.

Материал ғилми ентеклелеге менән айырыла, урынлаштырылған йырҙар идея-эстетик тәбиғәте йәһәтенән ҡиммәтле. 156 строфа башҡорт ғишыҡ йырҙары (журналда ул ҡыҫҡартылып бирелә) инеш мәҡәлә менән башлана, һуңынан аңлатмалар бирелә. Ғәрәп графикаһындағы башҡортса оригинал текстҡа йәнәш венгрса дүрт юллыҡ тәржемә урынлаштырылған. Һуңынан, Березин хрестоматияһынан 10 строфа йыр өлгөһө урынлаштырылып, уларға ла аңлатма бирелә. Материалдың аҙағында глоссарий ҙа бар. Башҡортса оригиналдарҙың ҡайһы берҙәренең конспектив характерҙа башҡарылыуы, ҡабаланыңҡырап яҙып алыныуы ла тойола.

Шуныһына иғтибар итергә кәрәк: сит илдә сыҡҡан тәүге рус ирекле поэзия өлгөһө 1861 йылда баҫылһа, ошо тип тағы башҡорт һүҙ сәнғәте йәдкәренең беҙгә мәғлүм булған тәүгеһе 1883 йылда донъя күрә. Көнбайыш илдәренән тотош христиан, славян халыҡтары диңгеҙе менән айырылған, етмәһә, улар өсөн башҡа динле башҡорт мәҙәниәте империя хакимы булған халыҡтыҡынан артта ҡалған тип кем әйтә алһын ошонан һуң? Шуға ла әлегә ҡәҙәр дәреслектәрҙә, монография, мәҡәләләрҙә башҡорт әҙәбиәтенең айырым күренештәрен, имеш, алдынғы рус демократик фекере йоғонтоһона дусар булып үҫешеүе хаҡындағы фекерҙәргә ҡарашты үҙгәртергә ваҡыт етмәнеме икән?

Мәғлүм, венгрҙар бөгөнгө Ватандарына беҙҙең яҡтарҙан күсеп ултырғандар. Күп быуын венгр ғалимдары үҙ нәҫел-нәсәбен төрки халыҡтары

---

[1] Рейсер С.А. Основы текстологии. — Л., 1978. С. 131.
[2] Русский эротический фольклор. — М., 1995. С. 5.

менән тығыҙ бәйләнештә ҡараған. XIX быуат урталарынан улар һун төркиҙәре менән туранан-тура мөнәсәбәттә, ә Аттила милли етәкселәре тигән фекер киң тарала. XIX быуат аҙаҡтарында яҙма ҡомартҡыларҙы ентекле тикшереү һөҙөмтәһендә Д.Хвольсон, Д.Паулер һәм Т.Аурелдәр, венгрҙар сығышы яғынан башҡорт халҡына иң яҡын милләт булырға тейеш, тигән фекергә килә. Ошо сәбәпле венгр тикшеренеүселәре башҡорттоң тарихи үткәне, мәҙәниәте, физик тибы кеүек мәсьәләләр менән ҡыҙыҡһына башлай. Был эшкә Кассель, Уйфальви, Гейза, Месаро кеүек ғалимдар айырыуса ихласлыҡ менән тотона. Уларҙың төп ҡыҙыҡһыныу өлкәләре булып башҡорттарҙың тел һәм антропология үҙенсәлектәрен өйрәнеү торған. Үҙҙәренә кәрәк фәнни мәғлүмәтте, бер яҡтан, Юферов, Рычков, Березин, Паллас кеүек билдәле урыҫ ғилем әһелдәренең нәшер ителгән хеҙмәттәренән алһалар, икенсе яҡтан, халыҡтың үҙенән, тере башҡарылышта ауыҙ-тел ынйыларын да туплағандар. Ошо изге эшкә ҙур өлөш һалған самими инсандарҙың береһе этнограф Армини Вамбери. Ул Башҡортостандың төрлө төбәктәренә ғилми сәйәхәт ҡыла, шул осорҙа уҡымышлы башҡорттар арҙамында рәсми рәүештә кеше араһында башҡарыу урынһыҙ тойолған, күп осраҡта яҙыҡ иҫәпләнгән халыҡ поэзияһы йәдкәрҙәрен яҙып ала.

Ҡомартҡыларҙың ҡайһы берҙәре, бәлки, бер-аҙ ҡолаҡҡа яңғырашһыҙ, хатта, билдәле дәрәжәлә, оятһыҙыраҡ булып та күренеүе мөмкин — ундайҙарын, әлбиттә, уҡыусыға тәҡдим итә алмайбыҙ. Ләкин шуны аңлау мөһим: уны йырлаған һәм яҙып алған кешеләр был строфаларҙы башҡорт, ғөмүмән, мосолман кешеһе ишетер, тип уйламаған, бәлки, сит илдән килгән бер ғалим ни сәбәптәндер кеше араһында әйтелмәгән таҡмаҡ һәм йырҙарҙы яҙып алып йөрөй, тип кенә ҡарағандарҙыр.

Һөйөү поэзияһы, ғишыҡ тотоу шиғриәте башҡорт халыҡ ижадында ла, хәҙерге поэзиябыҙҙа ла лайыҡлы урын тота. ”Ғишыҡ шиғырҙары” тигән баш аҫтында ”Ватандаш”тың 1999 йылғы 6-сы һанында академик Ғайса Хөсәйенов Санкт-Петербургта В.В.Радлов фондында һаҡланған яҙмаларҙан бер ни тиклемен һайлап нәшер иткәйне.

Будапештта нәшер ителгән текстарҙан күренеүенсә, Вамбери Башҡортостандың бер нисә төбәгендә булған. Бында Ҡалмаш, Һаҡмар, Базы, Сәрмәсән буйҙары телгә алына. Шул уҡ ваҡытта саф фольклор, йәғни халыҡ ижадының сағыу өлгөләре булыр строфалар менән бергә яҙма әҙәби традиция үрнәктәре лә ярайһы уҡ тулы сағылыш тапҡан. Яҙма текстар шәкерттәрҙең йәдкәр дәфтәрҙәренән күсерелгән булырға тейеш. Ошонан ғына сығып та, яҙма әҙәби башҡорт йыр поэзияһының XIX быуаттың икенсе яртыһында уҡ халыҡ араһында киң таралыш табып, популярлыҡ яулауы хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин. Мәҫәлән, күрше ҡаҙаҡ халҡының яҙма йыр поэзияһы XX быуат урталарынан ғына киң юлға сыҡҡанын онотмаҫҡа кәрәк.

Текстарҙы географик яҡтан шартлы рәүештә ике төркөмгә бүлергә мөмкин:

I. Ҡалмаш циклы: 1—77-се һәм 102—118-се строфалар;

II. Сәрмәсән циклы: 125—156-сы строфалар.

Әлбиттә, һәр бүленеш шартлы. Мәҫәлән, I циклда 60-сы строфала: ”Һаҡмар ҙа кистем илеңдән, Бик тәрән ере билеңдән...”, 109-сы строфала ”Яңы Базы буйҙарында” кеүек географик атамалар осрай. 115-

се строфа — тотош яҙма әҙәби традиция күренеше. II циклда иһә 140-сы строфала ”Ҡарғалыҡай буйы ҡуш уҫаҡ” тигән юл бар. Бындай шартлы бүленеш һис кенә лә был ҡомартҡыларҙың тик ошо төбәктәрҙең генә мираҫы тигәнде аңлатмай. Бүленеш текстарҙы тикшергәндә уңайлыраҡ булһын өсөн тәҡдим ителә, сөнки характерҙары буйынса ла, тематик йәһәттән дә был төркөмдәр, беҙҙең ҡарашҡа, бер-береһенән айырылып торғандай тойола.

Шәкерттәрҙең йәдкәр дәфтәрҙәренән алынған яҙма-әҙәби традиция мираҫына ҡараған өлгөләр 78—101-се, 119—124-се, шулай уҡ 63-сө, 115-се, 144-се строфалар булараҡ нәшер ителгән. Әлбиттә, бында ла ҡәтғи рәүештә ҡайһыһы строфа саф яҙма әҙәбиәткә, ҡайһыһы фольклорға ҡарай тип киҫкен бүленеш яһау маҡсатҡа ярашлы булмаҫ. Материалдың абсолют күпселеге халыҡ ижады йәдкәрҙәренән ғибәрәт булыуы шик тыуҙырмаһа ла, бында яҙма-әҙәби йыр традицияһының фольклор ерлектән айырымланып, үҙаллы йүнәлеш алыу процесына шаһит булыуыбыҙҙы хәтерҙән сығарырға ярамаҫ.

Текстарҙың үҙенсәлектәре булып, уларҙың Иҙел-Урал буйы дөйөм иҫке төрки әҙәби телендә яҙылыуына ҡарамаҫтан, башҡортса яҙылыштары, йәки Дим һөйләше өсөн характерлы булған ”ҫ” өнөн ҡулланыу миҫалдары осрай. Бынан сығып, йырҙарҙы яҙып алғанда венгр ғалимына халҡыбыҙҙың ҡайнар йөрәкле егеттәре ярҙам итеүе хаҡындағы фекергә килеп була. Мәҫәлән, 7-се строфала ”усағында”, ”ҡосағында” һүҙҙәре, 12-се строфала ”уҡа суҡ” һүҙе ҡаты ”сад” хәрефе менән баҫылған.

Күп осраған хаталарға килгәндә, текстарҙы нәшер иткән ваҡытта ғәрәп хәрефтәренең нөктәләрен айырмау сәбәпле, буталыу иң йыш осраған күренеш. ”Ҡ” хәрефе урынына ”ф”, ”б” урынына ”н” хәрефен ҡуйыу осраҡтары текстағы хаталарҙың иң еңелдәре. Ике һүҙҙе бергә ҡушып яҙыу йәки бер һүҙҙе ике, хатта өскә бүлеү осраҡтары ла бар.

Йырҙарҙың йөкмәткеһе Ғ.Б.Хөсәйенов әҙерләп баҫтырған шәлкемдәгеләргә ауаздаш булыуы, халҡыбыҙ араһында ғишыҡ йырҙарының, эротик поэзияның ярайһы уҡ киң таралған булыуы хаҡында һөйләй. Элекке идеологик (шәриғәт ҡанундары, коммунистик мораль) ҡалыптар йәмғиәттә тотороҡло стереотипик фекерләү рәүеше тыуҙырыу сәбәпле, был төр шиғриәт әлегәсә ғилем яҡтыһынан ситтә ҡала килә тиһәк, хата булмаҫ. Оҡшашлыҡтарҙы дәлилләү өсөн бер нисә миҫал килтереү урынлы булыр.

*В.В.Радлов фондынан:*
Ағиҙелкәйҙәрҙе кисер инем,
Уртаһында һал булһа.
Ҡоштар кеүек осоп ҡайтыр инем,
Һөйгән йәрем минең һау булһа.

Йәки:
Аҫыл да ҡоштоң, ай, балаһы
Ике лә генә булмаҫ, өс булыр.
Егет кенә кеше дәртле булыр,
Дәрттәренән ашһа, хур булыр.

*А.Вамбериҙыҡы:*
Ағиҙелкәйҙәрҙең өҫтөндә
Ебәк кенә баулы һал бара.
Һал арҡаһында бер ҡыҙ бала
Кил үҙекәй(емә) тип ялбара.

Йәки:
Аҡ ҡарсыға ҡоштоң балаһы
Бәйләнеп тороп бауҙа үлер.
Яҡшы атаның балаһы
Ҡоралдарын йәйрәп яуҙа үлер.

Баш мәҡәләһендә яҙғанынса, А.Вамбери был строфаларҙы Кама, Сәрмәсән, Һаҡмар йылғалары буйҙарында йәшәгән башҡорттарҙан яҙып алған. Шуға ла бында килтерелгән йырҙарҙы ниндәйҙер бер генә төбәктең мираҫы тип ҡарарға ярамай. А.Вамбери Дунай һәм Тиса йылғалары буйында көн иткән венгрҙарҙың башҡорт йырҙарына оҡшаш мотивлы йырҙары менән бик ҡыҙыҡ сағыштырыуҙар ҙа килтерә. Беҙ иһә, үҙ нәүбәтебеҙҙә, XIX быуаттың һуңғы сирегендә яҙып алынған таҡмаҡтарҙың варианттары әлегәсә халыҡ араһында киң таралған булыуына бер миҫал килтерергә йөрьәт итәбеҙ:

Эт йөнөнән шарф бәйләп
Ура муйындарыңа.
Кеше түгел, эт тә кермәҫ
Һинең ҡуйындарыңа.

*Вамбериҙа:*
Бер көн төндә төш күрҙем
Шәл бәйләнең муйыныңа.
Зифа буйым хәләл итеп,
Нисек керҙем ҡуйыныңа.

Күреүебеҙсә, бер үк фекер ҡабатлана — муйынға уралған шәл/шарф һәм муйын.

Һүҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтергә кәрәк: А.Вамбери нәшер иткән материал текстологик йәһәттән тел тейҙергеһеҙ. Материалды урынлаштырыр алдынан, мәсьәләне һәр яҡлап ентекләп яҡтыртҡан баш мәҡәлә, һуңынан һәр строфа венгрсаға һүҙмә-һүҙ тәржемә ителгән дүртюллыҡ менән төп текст, уларға ентекле комментарий һәм глоссарий урынлаштырылған. ”Ғишыҡ йырҙары” башҡарылыш йәһәтенән бөгөнгө академик фән критерийҙарына тулыһынса яуап бирә.

## Башҡорт ғишыҡ йырҙары

*(”Тел ғилеме тикшеренеүҙәре”, 17-се т., 1883, Будапешт)*

Бейек тауҙарға ут һалдым,
Янып ҡына китте тау буйлап.
Уң яҡ биткәйеңдән үпкән инем,
Һул яҡ битең ҡалды һулҡылдап.

***

Йәнекәйем, һинең бишмәтең
Билдәреңдән түбән биш сөйәм.[1]
Валлаһи ҙа тиһәм, яҙыҡ булыр,
Билхәҡиҡәт — һине бик һөйәм.

***

Баҡсаларға ҡояш төшәлер,
Алуан-алуан[2] емеш бешәлер.
Алуан ғына емеш бешкәндән һуң
Шул матурҙар иҫкә төшәлер.

***

Бейек кенә тауҙың башында
Ташҡа ғына баҫып булмайҙыр.
Һеҙ матурҙарҙы күрмәйенсә,
Өс сәғәт кенә түҙеп булмайҙыр.

***

Ут яналыр ҙа ефелдереп,
Бер матурҙың усағында.
Үлһәм дә шәһит үләм
Һин матурҙың ҡосағында.

***

Сәләм яҙҙым һиңә, ҡабул күрә ҡыл.
Мөбәрәк әлеңә[3] алып бөтә күр.
Ялыҡҡанда яҙайым бер-ике юл,
Янып торған йөрәккә ял була ул.

[1]Үлсәм берәмеге.
[2]Төлгәш.
[3]Ҡулыңа.

***

Алма ағастары булһасы,
Таянмаҫ инем талдарға.
Үҙ йәргенәкәйем булһасы,
Ялынмаҫ та инем яттарға.

***

Бер көн төндә төш күрҙем,
Шәл бәйләнең муйыныңа.
Зифа буйым хәләл итеп,
Нисек керҙем ҡуйыныңа.

***

Аҡ ҡалпаҡтарың уҡа суҡ,
Уҡаларын алһаң, йәме юҡ.
Һин һылыуҙан башҡа сабырҙарым юҡ,
Һинән башҡа торор хәлем юҡ.

***

Өҫкәйемә кейгән бишмәтем,
Буй-буй булыр уның буяуы.
Ир баштарына ни эш төшмәҫ,
Һис белгертмәҫ егет уяуы.

***

Ҡалмаш та буйынан берәү килә,
Аҡ ҡалфаҡ бауы — ал таҫма.
Ҡушылыр ғына булһаң ҡуш буйыңа,
Ҡушылмаҫ та булһаң алдатма.

***

Һары ла һары, ай, һап-һары,
Төштәремдә күрҙем мин һине.
Төштәремдә күреп ғашиҡ булдым,
Үлмәй тороп ташламам һине.

***

Аҡтыр ғына минең беләгем,
Күктер минең беләгем.
Теләгән теләгем булһа ҡабул,
Баҫылыр ғына ине йөрәгем.

***

Ҡазандарҙан Мәскәү күренер микән,
Ҙаҫҡыстарға менеп ҡараһам.
Йүгереп кенә килеп сығыр микән,
Былбыл ғына булып һайраһам.

***

Был донъяларҙың ожмахы —
Мәҙрәсәләрҙең босмағы.
Икенсе лә ожмах шулдыр беҙгә,
Һин һылыуҡайҙарҙың ҡосағы.

***

Ағиҙелдең аръяғында
Күгәрепкәй торған тау микән?
Ҙандуғастарым һайраһана
Иән һылыуҙарым иҫән-һау микән?

***

Йөрәктәрең ауыртһа,
Баҙарҙан алып алма аша.
Һин ташлаһаң да мин ташламам,
Ғазраил йәнем алмаһа.

***

Алтын ғына булып ағайым,
Көмөш кенә булып тамайым.
Үҙкәйҙәрең миңә булмағас,
Янып торған утҡа яғайым.

***

Баҡсаларҙа гөлдәр бөтөрмө,
Араһынан былбыл үтерме?
Үҙен генә күреп һүҙ бөтмәгәс,
Яҙыуҙар менән һүҙ бөтөрмө?

***

Уҡаларҙан ҡалған иҙбауың[4]
Бәйләһәнә минең муйыныма.
Зифа ла буйыңды хәләл итеп
Ятһана минең ҡуйынымда.

***

Бейек кенә тауҙың башында
Боролоп ҡына үҫкән бер үлән.
Үҙкәйҙәре киткән, һүҙе ҡалған,
Иҫкә төшкән һайын бер үләм.

***

Ефәк кенә ыштуф[5] бил ҡосар,
Матур ғына егет күҙ ҡыҫар.
Матур ғына егет күҙ ҡыҫҡастын
Күҙ ҡыҫмаған ҡыҙҙы гүр ҡосар.

***

Алтындарҙан мисәт баҫманым
Почта ҡағыҙҙары булмағас,
Эстәренә бүләк һалманым
Серкәйҙәреңде белә алмағас.

***

Зифа ғына буйың, затлы телең,
Ҡара ҡашың, аҡ йөҙөң!
Һинең генә өсөн мин үләмен,
Мәхрүм итмәһә минең бер һүҙем.

---

[4]Иҙеү бауы.
[5]Штоф, билбау.

***

Сымылдыҡҡайҙарҙа аҡ уҡа,
Тартмаһана, һылыу, өҙөрһөң.
Төндәрҙә суп-суп үберһең,
Көндөҙҙәрҙә нисек түҙерһең.

***

Аҡ келәттәрҙең ишеген
Иүгереп кенә килеп типһәнә.
Мине лә, һылыуым, бик һөйһәң,
Ауыҙымдан һурып үпһәнә.

***

Яҙыуҡайҙар яҙып хат ебәрҙем
Сургучтар менән мисәтләп.
Һис кешеләргә фаш итмәйсә
Үҙкәйҙәрең уҡый күрһәнә.

***

Ағиҙелдең аръяғында
Ефәк кенә булып һал бара.
Ефәктәрҙән йомшаҡ ҡыҙ бала,
Китмә, ағаҡай, тей ҙә ялбара.

***

Сынаяҡтарҙа — йәшел сәй,
Эсмәнем лә эсем көйгәнгә.
Яҙыу ҙа яҙып хат ебәрҙем,
Билхәҡиҡәт, һине һөйгәнгә.

***

Талдан ғына тамсы тамалыр,
Һыу төбөндә ҡамалыр.
Һыуһағанда һурып үпһәң,
Һыуһындарың шунда ҡаналыр.

***

Бара инем юл менән
Туп итеп төштө бер алма.
Иҫкә лә һанға һис алманың,
Суп итеп үпте бер ҡыҙ бала.

***

Быйыл бесән сапманым
Йәмле лә Ҡалмаш буйында.
Сыҡҡан да йәнем шунда сыҡһын,
Шул матурҡайҙарҙың ҡуйынында.

***

Мендемкәй лә аттың алаһын,
Өс уралып сыҡтым еремде.
Осраған сакта берәр үпһәм,
Ғәйеп тимәҫ инем яҙыҡты.

***

Ҫыбар ғына йәшелкәй лә өйрәк,
Йөҙөпкәй лә йөрөй буҙ булып.
Егеттәрҙең күңелен тапмағас,
Ник йөрөйһөң матур ҡыҙ булып.

***

Ҡара ғына ҡашым, ҡуй күҙем,
Иҫәпләп сыҡһам күп һүҙем.
Күптер әле ап-аҡҡай минең һүҙем,
Иҫәпләп үк тапҡай бел үҙең.

***

Баҡсаларҙа баҙыян сәскәһе,
Башҡайҙарын сәпсек өҙмәһен.
Иҫән булһаҡ бер ҡауышырбыҙ,
Минән өмөттәрең өҙмәһәң.

***

Баҡсаларға кереп мин эшләйем,
Гөл сыбыҡтарын йәшләйем.
Һөймәймен түгел, бик һөйәмен,
Ваҡыт тар ҙа түгел, нишләйем.

***

Ай, йәнкәйем, йән генәйем,
Ҡуймаһана буш тәнемде.
Матурҡайҙарға ҡауышһам,
Ҡорбан итер инем малымды.

***

Ишегем алды ҡуш ҡайын,
Япраҡ ҡына ярыр йыл һайын.
Һөйгән генә йәрең матур булһа,
Ғишыҡҡай ғына артыр көн һайын.

***

Ерәнсәй генә атым ялдарын.
Үреп һалдым киккеләп[6].
Һөйгән генә йәрең матур булһа,
Хәләл булһын биргән малдарың.

***

Һаҡмар ҙа кистем иленнән,
Бик тәрән ере биленнән.
Иртән — иҫемдә, кис — төшөмдә,
Һөйә алманым нәҙекәй биленнән.

***

Ҡашҡынаң нәҙек ҡәләмдән,
Аҡылдарың артыҡ әҙәмдән.
Аҡылың булһа аңларһың,
Яҙып әгләм иткән сәләмдән.

[6]Суҡлап.

***

Һарыҡкай турғай һаҙға ҡуна,
Һыу һалҡыны менән осорға.
Егет матурҙары төндә йөрөр,
Ҡыҙ матурын һайлап ҡосорға.

***

Тәҙрәнән утә ай күрҙем,
Баҫма сыбар тай күрҙем.
Һөйгән йәрҙән айырылдым тип,
Көн-төн илап йөрөгән йәр күрҙем.

***

Аласа бер үрҙәк, аҡ үрҙәк
Оса ла ғына микән күл буйлап.
Аласа ла шаршау эстәрендә
Ята ла ғына микән күҙе уйнап.

***

Бейек кенә тауҙың баштары,
Ҡыҙҙарындың ҡыйғас ҡаштары.
Ҡыҙҙарҙың да ҡыйғас ҡашын күреп,
Яналыр ҙа йөрәк баштары.

***

Ат бәйләнем ҡылғанға,
Атҡынайым биле талғанға.
Ҙер ултырамын да, бер торамын,
Йөрәккәй генәм янып барғанға.

***

Арҡаларҙа кәкүк саҡырһа,
Хәбәрҙәре төшөр илдәргә.
Кем сәләмдәрен кем еткерһен
Үҙ генәйем һөйгән йәрҙәргә?

***

Юл буйҡайҙарында йырлаған
Аяҡтары ҡыҙыл күгәрсен.
Етә алһаң, етеп үберһең,
Етә алмаһаң, йығылып үлерһең.

***

Көмөш кенә ҡашыҡ, һабы нәҙек,
Тотмаһана ҡулың бешерер лә.
Ғишыҡлыҡкай хәле яман икән,
Янып ҡына торған утка төшөрөр лә.

***

Күпрек кенә алды күк сәсәк,
Күкһенәй генә аттың аҙығы.
Уйнай ғына торғас берәр үпһәм,
Булыр ғына микән яҙығы.

***

Ҡан урынлашты минең бауырыма,
Тәнемдәгеләкәй тамырыма.
Шул матурға төшкән ғишҡым
Етер, буғай, минең ғүмеремә.

***

Булһа талип мулланың
Хуш дәүләте ул булыр.
Нәгаһ[7] керһәң ҡуйынына,
Ҡараңғы кис нур булыр.

***

Битен ҡуйһа битеңә,
Һалыр нәфис ҡулына.
Һылай-һыйпай ятыр ул
Мамыҡ кеүек тәненә.

***

Аҡ көмөшкә оҡшаған
Нәфис шөкрат тәндәре.
Шәкәр менән бал кеүек
Ауыҙының тәмдәре.

***

Талиптарҙың тауышы
Миҫле[8] һайрар һандуғас,
Ғашиҡ булып ни файҙа,
Ҡуйынына кереп ятмағас.

***

Талиптарҙың бармағы
Ҡәләм тотоп егелер.
Талип өсөн һәр даим
Ғәзиз йәнең өҙөлөр.

***

Талиптарҙың йөрөүе,
Беленмәйҙер баҫҡаны.
Ғашиҡ булып бармағас,
Артыҡ унан аҫҡаны.

***

Талиптарҙың салмаһы
Яңы яуған ҡар кеүек.
Талиптарҙың йөҙҙәре
Яңы тыуған ай кеүек.

***

Был донъяның дәүләте
Ҭалип берлә табылыр.
Йөрәгеңә ғишыҡ төшһә,
Ялҡын булып яндырыр.

[7]Капыл, уйламайынса.
[8]Кеүек.

***

Ишек алҡайҙары алмағас,
Киҫеп алдым алма булмағас.
Алдым ғына ҡәләм, яҙҙым сәләм,
Йөрәккәйҙәрем сыҙай алмағас.

***

Бурлат ҡына күлмәк, ал етен
Янҡай ғына уны уйған.
Ҡашҡынайың ҡара, йөҙөң ҡуйы,
Исемдәрең матур кем ҡуйған.

***

Һауаларҙа осҡан аҡҡоштоң
Ҡанат осҡайҙары күк микән?
Һинең менән ҡауышырға
Араларҙа аҙна күп микән?

***

Бейек кенә тауҙың башында
Һалҡын ғына шишмә күп булыр.
Һылыу ғына янҡай күңеләнде
Һыуытыусы дошман күп булыр.

***

Ҡыҙарып ҡына ҡояш сыҡҡанда,
Сыҡмаһана күҙкәй бешерһең.
Минең генә ғишҡым һиндә булһа,
Янған утҡа һикереп төшөрмөн.

***

Оҙон ғына тауҙың аҫтында
Ер еләге нисек бешә икән?
Һинең генә кеүек зифа йәрҙәр
Нисек тороп, нисек үҫә икән?

***

Таяна ғына торған таяғымдың
Нәҙек баштары ҡурғашлы.
Ғишыҡлыҡ хәле ауыр икән,
Йөрәккәйгә ҡандар урнашты.

***

Бейек кенә тауҙың башында
Уҡа ғына төҫлө бер үлән.
Төштәремдә күрһәм әлхәл[9] булам,
Уянып ҡына етһәм бер үләм.

***

Иҙеү бауҙарың уҡалы булһын,
Осҡайы суҡлы булмаһын.
Һөйәмен тигән булаһың,
Һөйөүҙәрең хәйлә булмаһын.

***

Йөҙөңдө әйләне күңел тик[10],
Сәсеңде ҡылды сөнбөл тик,
Үҙеңде ҡылды былбыл тик,
Итеп фазыл[11] бигәйәт[12].

***

Ки аҡ яҡут кеүек балҡып,
Ике садрың[13] тора ҡалҡып.
Кейә күлмәк уштин балҡып,
Нуры алдың ғәләмәте.

***

Айҙа минең ҡыҙыл алмам,
Ки һинән һис күңел алмам.
Бар иһә тапманым әүлән[14],
Ки һинән ғәйре ҡыҙ алмам.

***

Ҡара һауыттарың көмөштөр,
Ҡәләмдәре уның ҡамыштыр.
Йәшле генә йәшкә ҡәләм ҡашҡа,
Эй, хоҙайым, аллаһ, ҡауыштыр.

***

Гөл баҡсаларына керер инем,
Гөл баҡсаларына буялам.
Төштәремә керһәң, ай, ҡыуанам,
Йоҡоларымдан илап уянам.

***

Йоҡа ғына йәшел быяла,
Йөҙгенәйем һинән ояла.
Йөҙгенәйем һинән оялһа ла,
Йәнкәйләрем һине һөйә лә.

***

Ҡыҙлар ғына ҡыҙыл кейерҙәр,
Аҡ төймәнән уҡа тиәрләр.
Ҡыҙлар ғына белән дуҫлар булһаң,
Йәш балалар кеүек һөйәрләр.

---

[9]Хәлһеҙ.
[10]Кеүек.
[11]Затлы, матур.
[12]Мөмкин түгел.
[13]Түш.
[14]Әүәлдән.

***

Сылтырап ҡына аҡкан шишмәгә
Баҙыян ғына һалдым бүртмәгә.
Был ауылдарҙа бер матур бар,
Сәбәп табып булмай үпмәгә.

***

Һауаларҙа осҡан аҡкошто,
Ҫалырға атаһым килә.
Йоҡоларымдан күреп һушланмай,
Ҡуйындарыңа ятаһым килә.

***

Ерәнсәй ҙә аттың елеме
Һул яғында булыр нағышы.
Егетмен тигән егеттәрҙең
Кеҫәһендә булыр емеше.

***

Эсер генә инем бал булһа,
Янған йөрәкләргә ял булһа.
Һис тә һүҙҙәре булмай ҡалыр,
Сәсе сәскә бәйләнгән булһа.

***

Һауаларҙа осҡан бер үрҙәк
Һыу өҫтөнә төшөп ҡағыныр.
Һөйгән дә йәрең матур булһа,
Робағиҙар әйтеп һағыныр.

***

Һауаларҙа осҡан аҡкоштоң
Ҡанат осҡайҙары көйҙөргән.
Был донъяларҙа бар микән,
Ҡыҙ балалар кеүек һөйҙөргән.

***

Аҡ келәткәйҙәрҙең арҡаһы,
Аҡ келәттә бер үҙ генәһе.
Мин янынан киткәндә
Буҙлап ҡалды күңел генәһе.

***

Күк күгәрсен кеүек төшөр килеп,
Ҫайҙың ҡыҙы барыр ҡойоға.
Йән теләгәндәрен алмай ҡалһа,
Егеттәрҙең күңеле бойоға.

***

Ҡарғалыҡай буйы ҡуш уҫаҡ,
Ҡуш уҫаҡкай башы ҡуш йоҙаҡ.
Был ауылдарҙа бер матур бар,
Гонаһ булмаҫ микән ҡушылһаҡ.

***

Түбәтәйләрең түбәһе,
Түбәләре ҡыҙыл төлкөлө.
Әлгәре лә күңелем һиҙгән ине,
Йәр булаһыларың билгеле.

***

Аҡ келәттәрҙең алдында,
Бер матурлар берйән[15] алыша.
Аулаҡ ҡына булһа, күп һөйләшә,
Кеше булһа, ысбур[16] һөйләшә.

***

Иртән генә торҙом таң менән,
Ситән генә үрҙем тал менән.
Аҡ келәт эсе аулаҡ икән,
Ашаттылар йыуаса бал менән.

***

Төндә генә төнәп йөрөһәм,
Ашатырҙар микән баллы ҡаҡ.
Төнлә генә йөрөп тотолһам,
Ебәрерҙәр микән ярлыҡап.

***

Һауаларҙа осҡан аҡ өйрәк
Ағиҙелдән төшөп ҡом ашай.
Беҙҙең хәтерҙәрҙе тапкан ҡыҙҙар
Кейәүҙәргә барһа йөҙ йәшәй.

***

Өйөм түбәләре транса,
Ҡиблаларҙан осҡан ел аса.
Был өйләрҙә бер матур бар,
Уйнап-көлөп күңелемде аса.

***

Урай ғына урай сабырға,
Сәрмәсән буйы кеүек ер булмаҫ.
Инәләрҙән тыумаҫ, тыуһа тормаҫ
Һинең кеүек зифа йәр булмаҫ.

***

Ҡашҡайҙарың ҡара ҡәләмдән,
Буйғынайҡайҙарың зифа әҙәмдән.
Һин тыумағанһыңдыр инәнән,
Осоп төштөң микән һауанан!

---

[15]Ҡурҙыҡ.
[16]Спор, бәхәс.